Муллаҡай ауылы
төп
дөйөм белем
биреү мәктәбе
VI синыф уҡыусыһы
Мирзина Нуриҙә .

Етәксем: Башҡортостан тарихы
һәм мәҙәниәте
уҡытыусыһы
Вәлеева Нәзилә Ниғәмәт ҡыҙы.

# Башҡорт халыҡ педагогикаһы һәм тәрбиә

# Эштең актуаллеге:

1. Бөгөнгө көндә тәрбиә темаһы иғтибар үҙәгендә булыуы.
2. Тормошта ололар ғына түгел, йәштәр ҙә бала тәрбиәләүҙә ауыҙ – тел ижадын ҡулланыуҙары.
3. Халҡыбыҙҙың боронғо әҙәби жанрҙарын өйрәнеүҙә өлөш индергем килә.

# Әҙләнеү эшемдең маҡсаты:

- тәрбиә темаһын башҡорт халыҡ ижадының төрлө жанрҙарында яҡтыртылыуын өйрәнеү;

## бурыстарым:

- әҙәбиәт менән танышыу;
- тәрбиә темаһының башҡорт халыҡ ижадында тотҡан урынын билдәдәү;
- башҡорт халҡының күҙәтеүсәнлеген , ғилемлелеген, отҡорлоғон асыҡлау.

# Тикшереү алымдары, формалары

- ауылдаштарым менән осрашыу;
- башҡорт халыҡ ижады томдарынан, матбуғат биттәренән мәғлүмәт йыйыу

Тикшеренеү эшемдең субьекты – ауылдаштарым,
обьекты – ауыҙ – тел ижады .

Мәҡәлдәрҙә тәрбиә темаһы нисек яктыртылған һуң?

Башҡорт теленә ғәрәп теленән ингән «мәҡәл» термины урынлы, йәки кәрәк ерҙә әйтелгән тапҡыр һүҙ тигән мәғәнәне аңлата.

Ғаилә, сабый… Баланы ғаилә көҙгөһө тип әйтәләр, ә халыҡта: «Ағасына ҡарап алмаһы», «Ояһында ни – осҡанында шул», тигән мәҡәлдәр бала үҫтереүҙә ғаиләнең роле ҙур булыуын иҫбатлай.

Мәҫәлән, мәҡәлдәрҙә тәрбиә темаһы:

- Исемеңде ташҡа яҙма, ил йөрәгенә яҙ.
- Йыландың ағыуы телендә, ямандын ағыуы күңелендә.
- Күҙ йәше ебәрмәй.
- Ялған һөйләмә, оятлы булырһың.

Ҡайһы ваҡыт яңылышып та китәһең, шул ваҡытта

- «Абынмаҫ ат булмаҫ»
- «Ике ҡулың ни эшләһә, ике иңең күтәрер».

Шулай уҡ хеҙмәткә өйрәтеүсе мәҡәлдәргә лә иғтибар иттем. Тансыккужина Сәүҙиямал инәйҙән яҙып алдым.

- «Яланда һайрашмаһаң, ырҙында ыңрашырһың» - тине лә илап та алды колхоз – совхоздарҙа йәш саҡта, Аҡбирҙе апа менән ҡушарлап эшләп йөрөгән саҡтарын иҫләп.

- «Ҡалған эшкә ҡар яуа»
- «Иртә торған ас булмаҫ»
- - «Иренгән ике эшләр, артынан бармағын тешләр»

Баланың ҡылған эшенә, холҡона ҡарап мәҡәлдәр менән аңлайышлы итеп аңлатыу бик мөһимдер тигән фекергә килдем. Тормошта кеше ҡулы менән эшләгән матди байлыҡ юҡҡа сығыуы ихтимал, ә быуындан – быуынға ҡала килгән ауыҙ – тел ижады, рухи байлыҡ ниндәй генә осор булһа ла, үз баһаһын юғалтмаясаҡ

Мифологик эпостарҙа, тылсымлы әкиәттәрҙә - тәрбиә.
Эпос (грекса - хикәйә) – халыҡтың һәм граждандлыҡ тарихы хаҡында хикәйәләүсе эпик һәм лиро - эпик характерҙағы әҫәр.
«Урал батыр» эпосында тәрбиәүи тема бик яҡшы сағылдырыла, мәҫәлән:

- «Яуызға юлдаш булмағыҙ,
кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ»
йәки,
- «Олоно оло итегеҙ, -
Кәңәш алып йөрөгөҙ.
Кесене кесе итегеҙ,-
Кәңәш биреп йөрөгөҙ.
Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ,
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ.»

«Ир кеше - ил тотҡаһы» тигән халҡыбыҙ, тимәк ғаилә лә иң хөрмәтле, иң абруйлы ир булған. Быны мин «Урал батыр» эпосында Шүлгәндең атаһын тыңламай ҡан эсеүендә, яуызлыҡ юлынан китеүендә; ә «Мәргән менән Маянһылыу» ҡобайырында Маянһылыу үҙендә илен яҡларлыҡ көс тапһа ла, атаһы рөхсәт иткәс кенә ҡулына ҡорал алыуында күрәм.

Әкиәттәр уҡып, мин тыуған илгә, ергә һөйөү, хеҙмәтте яратып башҡарырға, иғтибарлы, талапсан, сабыр булырға өйрәтеүен асыҡланым.

«Тәрбиәүи әһәмиәте буйынса тыйыуҙар бик ҙур роль уйнайҙар,» - тине миңә инәйҙәр.

- - Һеперткене өҫкә күтәрмә.
- - Иҙәнде таҙа һепер, ирең щаҙра була.
- - Тупһаны аша атлап үт, тупһа үпкәләр.
- - Ашағанда аяғыңды болғама, шайтан килер.
- - Кейемеңдең тиҫкәреһен кейһәң, тиҙ алыштыр, үҙең тиҫкәрегә әйләнерһең.
- - Көйәнтәне аша атлама, ирең бөкөрө булыр.
- - Ир – егеттең юлын ҡыйма, юлың уңмаҫ.

# Таҡмаҡтарҙың тәрбиәүи әһәмиәте

1. Алдынғылар эшкә бара
Арбаларға тейәлеп.
Ялҡау – лодырь ҡарап ҡала
Бағанаға һөйәлеп.

2.Ал сәскәле, гөл сәскәле.
Күк сәскәле беҙҙең ер.
Ер шарында ҡояш кеүек
Балҡып тора беҙҙең ил.

- Халыҡ ижадының был төрө лә тәрбиә эшендә тос өлөш индерә һәм хәҙерге көндәрҙә лә киң ҡулланыла тигән һығымтаға килдем.

- Заман үҙгәрһә лә, тәрбиәлә ата-бабаларыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадының баһаһы бер ҡасан да кәмемәй, ҡиммәттәрен юғалтмай һәм юғалтмаясаҡ та.Унын асылмаған серҙәре бик күп икәнлеген аңланым. Киләсәктә лә был эшемде дауам итәсәкмен, сөнки миндә алла бирһә, ӘСӘЙ буласаҡмын. Ололарҙа: “Орлоҡто сәскәс, нисек тәрбиәләүеңә карап емеш бирәсәк, бына шул орлоҡ кеүек бала тәрбиәләүҙә бик ҡатмарлы, ауыр һынау,” - тинеләр.

# Тикшереү эшемдең һөҙөмтәһе

- халҡыбыҙҙың боронғо әҙәби жанрҙарын өйрәндем.
- бөгөнгө көндә тәрбиә темаһы иғтибар үҙәгендә булыуын асыҡланым;
- тормошобоҙҙа тотҡан урынын: йәмғиәт үҫешендәге үҙгәрештәр сағылыуы билдәләнде.

# Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт